Уҡыусыларыбыҙ ижады

ҺОРАУҘАР

Айгиз Сафин

Белмәйем,
Бөгөн көрәшкән дуҫымды иртәгә нимә көтәрен,
Хәйер һораған баланың күҙ йәштәрен кем һөртәрен,
Яза менән ярлыкау ҙа ҡайҙа ҡуялар өтәрен...
Ә ғалимдар асҡан, тиҙәр, ауырыуҙың яңы төрөн.
Ауыр уйға сумған килеш торам урам уртаһында,
Машиналар, тәкәй яҙып, зыйлап үтә уңда-һулда,
Артымдан эйәргән иптәш һөйләй ҡыҙҙар тураһында,
"Юлдаш FM" иһә маҡтай мөхәббәтте үҙ йырында.
Әммә бөтә ишеткәнем сығып китә ҡолағымдан,
Фәрештәләр, мине йәлләп, бәхәсләшә яурынымда,
Имеш, йәп-йәш кенә көйә ниҙәр күрмәгән юлында,
Шундай уйҙар һыйҙырған баш нисек тора муйынында?
Белмәйем.

Кисә бүлмәләш бер дуҫым иман хаҡында һөйләне,
Уның да тынғыһыҙ сағы, халҡы өсөн көйөнгәне,
Имеш, Аллаһ Тәғәлә беҙҙе, ниһайәт, йәлләне,
Дингә ҡабат юлдар асып, ҡараңғылыҡтан әйҙәне.
Үтә нәҙек ептән тора ҡатмарлы тормош бәйләме,
Ысҡындырам тиғән сакта өҙөлөп сыҡҡан төймәһе,
Фәҡәт Хоҙай теләгәнгә Үләт башҡортҡа теймәне.
Уйымда шул һөйләшеүгә ҡабат ҡайтамын әйләнеп...
Беҙҙең Ер ҡайҙа тәгәрәй, килгән ниндәй заманалар,
Урамдарға сыҡҡан һайын ярала яңы яралар.
Бахыр башҡорт егеттәре һыра эсеп алданалар,
Ҡыҙҙар, ҡыҫҡа итәк кейеп, фәхишәләй ҡыланалар,
Сүп-сар араһында тыуып, әсәһеҙ үҫә балалар,
Кем бай, шуның наҙан улын вузға һынауһыҙ алалар.
Инде нисәнсе уйында шах ҡуя беҙгә ҡаралар,
Был көрәштә еңер өсөн ҡалдымы тағы саралар?
Белмәйем.

Кеше элек маймыл булған, тип уҡыным дәреслектән,
Үлемдән һуң йәшәүсе юҡ, тип ҡысҡыралар гәзиттән,
Имеш, беҙ - бары хайуандар, ялктым былдай әкиәттән,
Был ғүмерҙән ни мәғәнә, әгәр йәшәмәһәк бүтән?
Вәҡыт үтә, үтә китә, мәңгелек йомғаҡын һүтәм,
Үҙ халҡына төкөргәндең тонсоғоп үлерен көтәм,
Күпме була алданырға, ҡараны айырмай ағтан?
Халыҡ миңә өмөт итә, мин халыҡҡа өмөт итәм!
Шайтан һуға алдан-арттан, беҙҙе ваҡ-төйәккә ҡүмә,
"Йыуыу"ҙарға ҡала донъя, булған һайын байрам-өмә,
Аҙғын заманға бирешеп, ҡайғыға ҡалып йөрөмә,
Ал Ҡөрьәнде, асып уҡы, аҙаҡ "Мин белмәнем" тимә.
Уҡы, уйлан: был ғүмерҙән беҙгә тик бер генә килә,
Иманға ҡайтыу юлдары ҡат-ҡат асылмаҫын, кем белә.
Был донъяның аҙағы бер: кемдер еңә, кем еңелә,
Бөгөндән ҡайғырта башла: ниндәй өлөш төшәр һиңә!

Мосолман зыялыйҙары тәрбиә мәсьәләһе буйынса фекер алышты

Мәликә АЛИБАЕВА, автор фотоһы

20 мартта "Ихлас" мәсетендә "Ислам диненең төп маҡсаты - рухи яҡтан камил кеше тәрбиәләү" тип аталған ғилми конференция булып үтте.

Республикабыҙҙың мосолман зыялыйҙары региональ ижтимағи ойошмаһы, "Фатхл Ислам", "Таҡъва", "Ихлас" дини ойошмалары үткәргән был ғилем мәжлесенә етмешләгән кеше йыйылды. Дүртөйлә, Миәкә районДарынан килеүселәр ҙә булды.

Мосолман зыялыйҙары ойошмаһы рәйесе Рәмзиә Сафина был сара хаҡында былай тип әйтеп китте: "Беҙҙең маҡсатыбыҙ - ойошманың ағзаларын йыйып, йәштәргә әхлаки тәрбиә биреү мәсьәләһен ентекле өйрәнеү ине. Сығыш яһарға теләүселәр күп булды - ҡыртҡан артыҡ, тик барыһы ла ҡатнаша алманы шул. Килгәндәрҙең күбеһе - оло йәштәгеләр. Быһын сәбәбе бер: көҙ көнө тағы ла бер конференция уҙғарыласаҡ. 65-се татар гимназияһында йәштәрҙе йыясаҡбыҙ".

Кәңәшмәнең пленар ултырышында Валерий Хазиев ("Мосолман мәғарифы үсеше" фәнни-ғәмәли эҙләнеү үҙәгенең директоры, профессор, философия фәндәре докторы), "Ғофран" мәсете уҡытыусыһы Тулҡын Кәримбирҙиев һәм Әхмәт Рәхимов (академик, психология фәндәре докторы, атҡаҙанған фән эшмәкәре) сығыш яһанылар.

"Методик ярҙам артынан - үткәндәргә" тип аталған докладында Тулҡын хәҙрәт уҡытыу мәсьәләһенә туҡтап китте: "Уҡытыу ваҡытында программаларыбыҙ бер төрлө булһа, арабыҙҙа ыҙғыш та булмаясаҡ, яңылыш фекерҙәр ҙә. Белем биргәндә ата-бабаларыбыҙ ҡулланған төплө китаптар менән эш итһәк, яҡшы булыр. "Ғофран" мәсетендә хәҙер шундай китаптарҙы йыябыҙ ҙа инде. Иншаллаҡ, уларҙы яңынан баҫтырасаҡбыҙ". Миҫал итеп ул Ғәйнетдин Әхмәдовтың "Болғар тарихы"н, 1912 йылда баҫтырылған балалар өсөн китапты атап үтте.

Әхмәт Рәхимов, әхлаҡ беҙҙең төбәктә Ислам дине арҡаһында һаҡланып килә, тиғән фекер менән уртаҡлашты. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) түбәндәге һүҙҙәренә колаҡ һалырға өндәне: "Әгәр ҙә был донъяла бәхетле булырға теләһәң, һатыу эшен үҙләштер. Әгәр ҙә теге донъяла бәхетле булырға теләһәң, әхлаҡлы, әҙәпле бул. Әгәр ҙә был донъяла ла, ахирәттә лә бәхетле булғың килһә, уныһын инде ғилемдә эҙлә". Кеше алған белемен дөрөҫ ҡулланһа, тыйылғандарҙан ситләшһә, рухи яҡтан да үҫешәсәк. Әхлаки тәрбиә һәм донъяуи белем биреү бергә барырға тейеш.

"Аристотель былай тигәйне: "Әгәр ҙә беҙ фән юлынан алға барабыҙ икән, ә әхлаки яҡтан ҡалышһаҡ, тимәк, беҙ артҡа ҡарай юл тотҡанбыҙ". Мин педагогия училищеһында уҡыған сакта ошондай хәл булды. Бер егетте бәрәфтә тәмәке тәтәтеп торғанын күргәндәр. Икенсе көнөнә уны "педагогтарға хас булмаған тәртип" өсөн уҡыуҙан ҡыуып та сығарҙылар. Бөгөнгө көндә бөтә курсташтарым иҫәнһау, теге егет кенә был донъянан иртә китеп барҙы. Әхлаҡһыҙлек быға сәбәпсе булғандыр", - тип бөтөрҙө һүҙен академик.

Валерий Хазиев "Ислам диненә белем биреү принциптары" исемле сығышында дини белем биреү системаһын яңыртыу, беҙҙең ысынбарлыҡҡа ярашлы итеп ҡороу тураһында һөйләне. "Бүздәк йә икенсе бер районда кескәй Египет, Малайзия, Сауд Ғәрәбстаны төҙөү - мәғәнәһеҙ эш. Беҙ үҙ еребеҙҙә йәшәйбеҙ, ҡунаҡ түгелбеҙ. Шуға ла дини ғилем биреү ысулдарын үҙе-беҙгә яраҡлаштырыр кәрәк. Бында, әлбиттә, дини ҡанундарҙы үҙгәртеү, модернизациялау тураһында һүҙ бармай. Был үҙгәреүсән тормошта нимәләр стабиль булырға тейеш".

"Шул уҡ ваҡытта, уҡыу йорттарында балаларҙы - белем тултырыу өсөн тегелгән тоҡ кеүек ҡабул итәләр. Был нимәгә килтерә? Социологик тикшеренеүҙәр барышында бер малайҙан: "Мөхәббәт нимә ул?" - тип һорағандар. Бала фән позицияһынан сығып, төрлө методтар ҡулланып, был һүҙгә аңлатма эҙләп ҡараған, тик яуап таба алмайынса: "Фигня какая-то", - тигән. Йәштәр өсөн "мөхәббәт", "намыҫ", "кешелек дәрәжәһе" кеүек төшөнсәләр аңлашылмай. Фән уларҙы аңлата алмай бит", - тине Валерий Хазиев.

Намаҙҙан һуң халыҡ секция ултырыштарына таралды. Конференция хаҡында тамашасылар ни әйтер?

Йәмилә Ғирфанова:

- Күберәк ошо темаға ярашлы хәҙистәр һөйләнәләр ине. Иман байлығы алып ҡайтһаҡ, шул иң мөһиме. Сәйәси һорауҙар нимәгә кәрәк инде беҙгә.

Резеда Нуритдинова:

- Сараны ойоштороусылар ҙур эш башҡарғандар. Көнүҙәк темаларҙы яҡтыртырға тырышҡандар. Мин үҙемдең ҡыҙымды күҙ алдыма килтереп ултырҙым. Уға тиҙҙән 14 йәш туласаҡ, мәсеткә алып килеп, Ислам дине менән ныҡлап таныштырырға ниәтләйем.

Ғәжәйеп орлоҡтар

Оксана НАЗАРОВА, автор фотоһы

Күптән түгел Исмаилова Рәмзиә абыстай менән танышырға насип булды. Ул Рәсәй Ислам университетының II курсында ситтән тороп уҡый, үҙе Кейөргәҙе районы Мәмбәтҡол ауылынан. Әңгәмәбеҙҙең төп темаһы - инәй районДан алып килгән ғәжәп орлоҡтар булды. Ике ҡабаҡтан барыһы 220 орлоҡ табылған, һәр береһендә йә ғәрәп хәрефе, рим цифраһы, йә тағы бер ниндәй һүрәт төшөрөлгән. Шул уҡ ваҡытта, Ислам - хәҡиҡәт дине, һәм ниндәй булһа ла раҫлаусы дәлилдәрһеҙ ҙә мосолмандарҙың йөрәгендә, аңында ныҡлы урын биләй. Аллаһҡа ышанғандар өсөн ҡабатланмаҫ билдә - Ҡөрьән китабы ла етерлек. Әммә был орлоҡтар кеүек сәйер күренештәргә иғтибар итмәү дөрөҫ булмаҫ ине.

- Рәмзиә Һиҙиәт ҡыҙы, был ҡабаҡ орлоҡтары үҫегеҙҙеке түгел, тигәйнегеҙ...

- Эйе, улар Ауырғазы районы Балыҡлы ауылында йәшәүсе Минира Жданованыҡы. Ул дин әһеле. Был үҙенә күрә бер мөғжизәле ҡабаҡтар ябай ауыл ҡатынының баҡсаһында нисек үҫеп сыҡҡан, тип ҡыҙыҡһыныусылар булыр. Әлбиттә, Минира Ғафан ҡыҙының иман ныҡлығы, саф күңеле быға сәбәпселер. Уның нәҫелнәсәбендә әүлиәләр ҙә булған, динде хөрмәт иткән халыҡ улар.

Бер көн Минира апайҙың йортонда мал һуйғандар. Йәшелсә бешерергә булып, бер ҡабаҡтың эсен ярһалар, ошо хикмәтле орлоҡтарҙы күреп ҡалғандар. 187 дана. Тағы ла бер кескәй ҡабаҡ эсенән 33 яҙыулы орлоҡ тапҡандар. Минира Ғафан ҡыҙы - дингә мөккибән киткән кеше. Изге китапты ғәрәп телендә уҡый, шуға ла хәрефтәрҙе ваҡытында танығаН, орлоҡтарҙы ташламаған.

- Улар һеҙгә нисек килеп эләкте һуң?

- Минира апай орлоҡтарҙы Салауат шәһәрендә йәшәгән Тәнзилә һеңлеһенә биргән. Ә Тәнзилә Ғафан ҡыҙы - минең Райхана туғанымдың яҡын дуҫы. "Апай Өфөгә уҡырға китә, бер юлы орлоҡтарҙы уҡытыусыларына, дин белгестәренә күрһәтер", - тип миңә тапшырғандарҙыр инде. Аллаһы Тәғәлә был донъялағы бар нәмәне, заттарҙы бушҡа ғына яралтмаған. Һәр кешенең үҙ вазифаһы бар. Шуға ла орлоҡтар минең ҡулға юҡҡа ғына килеп эләкмәгәндәрҙер, тип уйлайым. Халыҡҡа күрһәтергә булдым. Ғибрәт алһындар, ышанмағандар, Аллаһы Тәғәләнең тағы ла бер мөғжизәһен күреп, тура юлға баҫһындар өсөн. Ошо мине лә бәхетле итер.

- Яҙмалар, һүрәттәр хаҡында әйтеп китһәгеҙ...

- Береһендә күҙ төшөрөлгән, керпектәре лә бар. Аллаһы Тәғәлә барыһын да күреп тора. Ул - Күреүсе, Ишетеүсе. Барлыҡ ғәләмдә үҙ кеүәте, хакимлығы аҫтында тотоуын күрһәтәләр.

Ҡазан, ғәрәп баҫмаларында осраған айырым хәрефтәр, фатха, касра билдәләре, рим цифрҙары осрай. Шулай уҡ, 14 урында була торған сәждә (тиләвәт сәждә) билдәһе бар.

Тағы ла өҫтәп шуны әйткем килә, ҡабаҡ үҙе - йәннәттән ергә төшөрөлгән емештәрҙең береһе булып һанала. Зәйтүн ағасы, анар, хөрмә кеүектәрҙең рәтенә инә.

- Рәхмәт, Рәмзиә абыстай. Уҡыуығыҙҙа уңыштар.

Рәсәй Ислам университетының Теология факультеты деканы урынбаҫары Вәсилә Ниғмәтуллина ла әңгәмәнән ситтә ҡалманы: "Тағы ла был орлоҡтарҙа оҙонлоҡ билдәһе күрһәтелгән. Ғәрәп телендә яҙылған "Аллаһ" һүҙе миңә көслө тәьҫир итте. Каллиграфия бик яҡшы, әйтерһең дә, кемдер ултырып, быларҙы тырышыптырышып уйып яҙған".